**2 тур 2016-2017 г.**

**5 - 8 кластар өсөн интернет-олимпиада һорауҙары**

1. Үҙ-ара мәғәнәүи һәм грамматик бәйләнештә тороусы һөйләмдәр берләшмәһе нисек атала?

**-Текст.**

2. Нөктәләр урынына бәйләүсе һүҙҙәр ҡуйығыҙ, уларҙың аҫтына һыҙығыҙ.

*Көньяҡ Уралдың иң матур урынында, Бөрйән районында, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығы урынлашҡан.* ***Ул*** *1930 йыл ойошторолған.* ***Дөйөм*** *майҙаны 70 мең гектарҙан ашыу. Унда һунарсылыҡ итеү һәм балыҡ тотоу тыйылған, урманды киҫергә һәм даланы һөрөргә ярамай.* ***Ҡурсаулыҡта*** *эшләүселәрҙең күҙәтеүе аҫтында бөтә йәнлектәр һәм* ***ҡоштар*** *йәшәй. Ғалимдар* ***унда*** *йәшәүсе хайуандарҙың тормошон өйрәнәләр.*

3. Текста беренсе торорға тейеш булған һөйләмде табығыҙ:

*Беҙҙең райондан Өфөгә поезд, самолет һәм пароход менән барып була. Уның урамдары киң, оҙон һәм матур. Күп ерҙәрҙән автобус менән киләләр. 1.****Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы****. Өфөлә төрлө заводтар һәм фабрикалар күп.Өфөнө ике яҡлап уратып Ағиҙел йылғаһы аға.*

- ***Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы****.*

4. Килтерелгән миҫалдың стилен билдәләгеҙ:

*Башҡортостанда меңдән ашыу күл бар. Улар бигерәк тә Әбйәлил һәм Учалы райондарында күп. Урал алдында иң ҙур күлдәр – Аҡкүл, Ҡандракүл һәм Асылыкүл. Урал аръяғында – Өргөн менән Мауыҙҙы.*

***-Фәнни (популяр) стиль.***

5. Бирелгән һүҙҙәрҙең синонимдарын табығыҙ һәм синонимдар рәтенең доминантаһын күрһәтегеҙ.

***Йәштәш-****тиңдәш,ҡорҙаш,тиҫтер,тиң.*

***Ҡолау-йығылыу***,*барып төшөү.*

***Яратыу***-*һөйөү,ғашиҡ булыу.*

***Ваҡыт***-*мәл,осор,миҙгел,дәүер,заман.*

***Матур***-*сибәр,күркәм,һылыу,нәфис,гүзәл.*

***Сабый-****бәпәй,бәпес,кескәй.*

6. Рус телендә бирелгән фразеологизмдарҙың башҡорт телендәге парҙарын тап:

   *Два сапога пара-Ишәй менән Ҡушай.*

   *Душа нараспашку.-Бер ҡатлы.*

   *Глаза на мокром месте.-Балауыҙ һығыу.*

   *Сыграть в ящик.-Теге донъяға китеү.*

   *Кот наплакал.-Күҙ асып йомғансы.*

   *Бить баклуши.-Трай тибеү.Бәкәлгә һуғыу.*

   *Пристал как банный лист.-Һағыҙаҡ кеүек йәбешкән.*

   *Водить за нос.-Кәкре ағасҡа терәтеү.*

   *Выеденного яйца не стоит.-Ебегән ауыҙ.*

   *На душе кошки скребут.-Йөрәккә тоҙ һалыу.*

7. Бирелгән фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәләрен аңлатығыҙ:

*Атлы барып йәйәү ҡайтҡан –* ***маҡсатҡа ашмаған хыял****.*

*борсаҡ сәсә -* ***бик маҡтанып хәбәр һөйләү****.*

*тирмәне шәп тарта -* ***ашауға бик шәп,***

*теш ҡайрау -* ***асыу һаҡлау,уҫал ниәт тотоу. ҡойороҡ болғау - түрәләр алдында ҡуштаҡланыу,ярамһаҡланыу.***

*мамай заманында -* ***әллә ҡасан булған хәл****.*

*дөйә ҡойроғо ергә еткәс* ***- булмай, тормошҡа ашмай торған эш-хәл тураһында мыҫҡыллабыраҡ әйтеү.***

8. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлегеҙ, ижек төрҙәрен билдәләгеҙ:

*Бо-рон-го (асыҡ-ябыҡ-асыҡ),*

*а-рыҫ-лан(асыҡ-ябыҡ-ябыҡ),*

*ет-меш(ябыҡ-ябыҡ),*
*мө-хәб-бәт(асмыҡ-ябыҡ-ябыҡ),*
*ҡур-ҡаҡ(ябыҡ-ябыҡ) ,*
*ал-маш-сы(ябыҡ-ябыҡ-асыҡ).*

9. ***Ҡара диңгеҙ*** *һүҙенең яһалышын аңлатып яҙырға?*
***Бәйләү юлы менән яһалған ҡушма һүҙ.***

10. *Юлдаш, ҡурайсы һүҙҙәренең ялғау төрөн билдәләгеҙ?*
*Юл-**даш**, ҡурай-**сы** **(-даш,-сы –һүҙ яһаусы ялғауҙар)***

11. *Александр Невскийҙ**ар**, Суворов**тар**, Салауат**тар**, Кутузов**тар**, Котовскийҙ**ар**, Чапаев**тар** атта йөрөгәндәр (Н.Нәжми )* Һөйләмдә бирелгән яңғыҙлыҡ исемдәрҙең күплек төрөн билдәләгеҙ?

**-Үҙгәртеүсе ялғау,һан категорияһы аффикстары**.

12. *Бик күп **илдәр** гиҙҙем, **һыуҙар** кистем. Фәриҙәгә яңы **күлдәк** алғандар*. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәр ниндәй килештә килгәндәр?
**-Билдәһеҙ төшөм килеш**.

13. ***Тәүәккәл таш ярыр, булдыҡһыҙ баш ярыр.*** Һөйләмдең эйәһе ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?
***Тәүәккәл, булдыҡһыҙ-сифат***

14. *Фото, код, ток һүҙҙәрендәге О хәрефе ҡайһы килеш ялғауында һаҡланмай?*
**-Бер килештә лә һаҡланмай.**

15. Алмаштарҙың төркөмсәһен билдәләгеҙ: *Ай уға һәр кис ошо һүҙҙе ҡабатлаған…*
***Уға**-ҙат алмашы.*

**Һәр**-*айырып әйтеүҙе белдергән билдәләү алмашы.*

***Ошо*** *– төп күрһәтеү алмашы.*

*16.* Ҡылымдарҙың яһалышын билдәләгеҙ: *ауыҙ ит, күңел ас, ҡаршы ал, хәл йый.*

***-Ҡушма ҡылымдар.***

17. *Исемеңде ташҡа яҙма, ил йөрәгенә яҙ* (Мәҡәл). Бирелгән һөйләмдең әйтелеү маҡсаты буйынса төрөн билдәләгеҙ.

**-Өндәү һөйләм.**

18. Эйәлек затында килгән исемдәрҙе табығыҙ, ниндәй килештә тороуын һәм ниндәй һөйләм киҫәге булып килеүен билдәләгеҙ.

***Башҡортостаным (төпкилеш,эйә)*** *минең, гөлбаҡсалар* ***иле(төп килеш,хәбәр)****! Беләһегеҙме, унда йәйге айҙарҙа гөлдәрҙән бал яуа, арыш баш ҡоҫҡан саҡта баҫыу өҫтөндә монар ага, ә күктә һабантурғай, ер өҫтөндәге әле зәңгәр, әле күгелйем тулҡынға ҡыуанып, үрҙән моң ҡоя. Эй, йәйрәп ятҡан* ***Бүздәгем(төп килеш,эйә)*** *минең! Бүздәк* ***һауаһының(эйәлек килеш,аныҡлаусы)*** *тәнгә* ***сихәтен(төшөм килеш,тултырыусы)****, йәнгә* ***рәхәтен(төшөм килеш,тултырыусы)*** *былбыл* ***телдәре(төпкилеш,эйә)*** *лә әйтеп бирә алмаҫ, ти торғайны минең* ***әсәйем(төпкилеш,эйә)****. Ул саҡта бала-саға ғына инем, ә унан, Бүздәктән ары донъяны күҙ алдына ла килтермәгәс, уның ниңә шул тиклем мөхәббәтле итеп һөйләшкәнен аңлай алмағанмын. Хәҙер белдем мин* ***Тыуған илкәйемдең (эйәлек килеш,тултырыусы) ҡәҙерҙәрен(төшөм килеш,тултырыусы)****!*

*Шул тиклем һағындым үҙебеҙҙең ерҙе, тупраҡты! Ҡара тупраҡты! Һағыштарымдан йөрәккәйемә ҡан һарҡыны…Үҙебеҙҙең яҡтың* ***яҙын,көҙөн, ҡышын, йәйҙәрен(төшөм килеш,тултырыусы)*** *һағындым. Ҡайҙа һуң һеҙ, гәзиз тыуған* ***яҡтарым(төпкилеш,эйә)****?! Әле мин диңгеҙҙәр, далалар, ширлыҡтар, тауҙар, урман-ҡырҙар аша ҡайтып китер инем ҡош булып, Урал* ***бөркөтө (төпкилеш,тултырыусы)*** *булып ҡайтыр инем һеҙҙең янға*! (К. Кинйәбулатова)

*19.* Бирелгән омонимдарҙың төрөн билдәләгеҙ: *өй (йорт) – өй (бойроҡ һөйкәлешендә ҡылым формаһы )*

-***Лексик грамматик омоним****.*

20. Антоним, синоним, омоним һүҙлектәре ниндәй төркөмгә ҡарай?

***-Лингвистик һүҙлектәр (телдә булған һүҙҙәргә аңлатма бирелә).***